*Фәүзиә ЮЛАМАНОВА,*
*район башкорттары королтайы башкарма комитеты рәйесе*

# Бер ғаиләләй булып...

Ауырғазы ерендә башҡорт, татар, рус, сыуаш, мордва, украин һәм башҡа халыҡ вәкилдәре йәшәй. Уларҙың дуҫлығы, бер ғаилә булып татыу йәшәүе иң тәүҙә ҡулға-ҡул тотоноп эшләүҙә, һабантуйҙарҙа, ошо халыҡтарҙың мәҙәниәт көндәрен билдәләүҙә, ҡоролтайҙарҙа сығылыш таба. Ауырғазы районы башҡорттарының ҡоролтайы дүртенсе йыл уңышлы ғына эшләп килә.

Башҡорттар күпләп йәшәгән ауылдарҙа ҡоролтайҙар үткәрелеп, халыҡты йыйып һөйләшеп, ауыл Советы кимәлендә биш кешенән торған ҡоролтай башҡарма комитеттары һәм уның рәйестәре, аҡһаҡалдар ҡорҙары һайланды. Уларҙы урындарҙа абруй яулаған, тейешле тәжрибә туплаған кешеләр етәкләй. Ҡоролтайҙың урындағы башҡарма комитеттарында вәкил булып район ойошмалары етәкселәре һәм башҡарма комитет ағзалары, хакимиәт башлығы Миҙхәт Вәлитов ҡатнашты. Унда башҡорт халҡының көнүҙәк мәсьәләләре тикшерелде, социаль-иҡтисади проблемалар күтәрелде, улар башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү планына индерелеп, уны тормошҡа ашырыу буйынса эштәр билдәләнде.

Шуныһы шатлыҡлы, билдәләнгән эштәр, аҙымлап булһа ла, тормошҡа ашырыла килә. Усман, Өсбәлеш ауылдарында мәктәптәр асылды, Үтәймулла, Усманда мәҙәниәт усаҡтары файҙаланыуға тапшырылды, Мораҙым ауылында «Ынйылар» исемле ике ҡатлы балалар баҡсаһы сафҡа инде, Түрһәгәҙелә асфальт юл һалынды, башланғыс мәктәп 9 йыллыҡҡа әйләндерелде. Бөгөн күпселек башҡорт ауылдарында йорттар газ менән йылытыла. Талбазы ауылында бәләкәй башҡорт ауылдары балаларын йыйып уҡытыу маҡсатында башланғыс кластар өсөн гимназия асылды. Башҡорт балаларын үҙ телендә уҡытыу буйынса ла эштәр яҡшыртылды: 96 процент башҡорт балалары үҙ телен өйрәнә.

Халыҡ үҙе лә тормош-көнкүрешен яҡшыртыу хәстәрлеген күрә. Бәләкәй ауылдарҙа ла йәштәр тырышып йорттар һала, ауылдар күҙгә күренеп ҙурая бара.

Шулай ҙа башҡарма комитет алдында халыҡтың социаль-иҡтисади хәлен яҡшыртыу буйынса ярайһы уҡ ҙур бурыстар тора. Беҙҙе төпкөлдә ятҡан бәләкәй башҡорт ауылдарының хәле борсой. Ул ауылдарға газ индереү, асфальт юл һалыу, һыу үткәреү кеүек мәсьәләләр тулыһынса хәл ителеп бөтмәгән.



*Юламанова Фәүзиә Ғәли ҡыҙы 1959 йылда Ҡырмыҫҡалы районының Ибраһим ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлаған. 1985 йылдан халыҡ мәғарифы өлкәһендә эшләй. Әлеге көндә Ауырғазы район халыҡ мәғарифы идаралығында методист. 1996 йылдан район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетын етәкләй.*



05-2001.p65 18 27.07.01, 11:32



Башҡарма комитет планында тәрбиә мәсьәләһе айырыуса мөһим урын тота. Тәрбиәнең төп нигеҙе — ғаилә. Социаль педагогтар фекеренсә, бары тик ғаилә генә балаларҙа кешелеклек сифаттарын тәрбиәләй. Әгәр ата-әсә балаһына дөрөҫ тәрбиә бирә алһа, киләсәктә уны бәхетле ҡартлыҡ көтә. Шуға күрә педагогик коллективтар ата-әсәләргә педагогик белем нигеҙҙәрен үҙләштереүҙә ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш. Был йәһәттән 1998 йылдың Президентыбыҙ М.F.Рәхимов тарафынан Ғаилә йылы тип иғлан ителеүе лә бик ыңғай күренеш булды. Ошо йәһәттән мәктәптәрҙә ата-әсәләр университеттары, «Йәш ата-әсәләр мәктәбе» кеүек сараларҙың эшмәкәрлеге тағы ла нығыраҡ көсәйтелде. Төрөмбәт, Мораҙым мәктәптәрендә үткәрелгән әсәйҙәр, атайҙар конференциялары һәм конкурстары традицияға инде. Балалар баҡсаларында ата-әсәләр өсөн «Минең ҡәҙерлеләрем», «Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар», «Татыу ғаилә» исемле бerҙәм кисәләр, халыҡ йолаларын тергеҙеү һәм шулар йоғонтоһонда «Ҡаҙ өмәһе», «Нардуған», «Килен төшөрөү», «Ураҙа» байрамдары үткәреү һөҙөмтәһеҙ ҡалмаҫ, моғайын.

Ауыр ғаиләләр менән эшләүгә лә ата-әсәләр комитеты бик күп көс һала. Ғаилә —йәмғиәттең мөһим өлөшө. Уның сәләмәт булыуы, йәшәйеше, үҫеше бөгөнгө социаль хәленә тығыҙ бәйле. Күп башҡорт ғаиләләренең көн итмеше күҙгә күренеп насарая, демографик хәл борсоуға һала. Мәҫәлән, беҙҙең районда 1997 йылда 495, 1998 йылда 451, 1999 йылда 421 бала донъяға килгән. Үлем тыуымдан күберәк. Шулай уҡ никахҡа инеүселәр һаны кәмей, айырылышыуҙар күбәйә. Һәр ауылда 30-40 йәшлек өйләнмәгән егеттәр һаны артҡандан-арта.

Эскелектең киң таралыуы ла ҡырҡыу мәсьәлә. Бигерәк тә йәштәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың эсеүе ҡурҡыныс.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеттар алдында дәүләт органдары менән берлектә башҡорт халҡының рухи-мәҙәни, ижтимағи-сәйәси һәм социаль-иҡтисади хәлен үҫтереү программаһын ҡарауҙы ҡырҡыу ҡуйҙы. Был программа мәсьәләләрен тормошҡа ашырыуҙа мөһим урын ғаилә усағын һаҡлаусы, милли мәҙәниәтте, тел һәм үҙаңды үҫтереүсе ҡатын-ҡыҙ — әсәгә төшә. Ләкин башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының шәхси һәм ижтимағи тормошонда сиселмәгән бик күп проблемалар бар, социаль яҡтан да улар аҙ яҡланған. Матди һәм рухи хәйерселек, эшһеҙлек, енәйәтселек кеүек бик күп насар күренештәр ғаиләнең матди хәленә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ һаулығына ҙур йоғонто яһай. Ошоларҙы иҫәпкә алып, 2000 йылдың сентябрендә үткән Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары съезы алдынан район ҡоролтайы башҡарма комитеты башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының конференцияһын үткәрҙе. Ҡатын-ҡыҙҙар был конференцияға ҡунаҡ булып ҡына килмәне, үҙ ауылының ҡатын-ҡыҙҙарының проблемалары менән сығыш яһаны, фекер алышты, съезға делегаттар һайланды.

Район башҡорттары ҡоролтайының эш программаһында Ауырғазы районы менән Һамар өлкәһе башҡорттары араһында дуҫлыҡ урынлаштырыу ҡаралғайны. Алты кешенән торған Ауырғазы делегацияһы Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары менән берлектә Һамар өлкәһенең Большая Черниговка районына барып, ике район араһында үҙ-ара дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек итеү буйынса килешеү төҙөнө һәм беҙҙең делегация үҙенең төп бурыстарының береһен үтәп ҡайтты — башҡорт халҡының күренекле ҡыҙы, талантлы яҙыусы Һәҙиә Дәүләтшинаның йорто урынына мәрмәр таш ҡуйҙы. Был сәфәрҙе ойоштороуҙа район хакимиәте башлығы М.Вәлитов ҙур ярҙам күрһәтте.

Шулай, замана ауырлыҡтарына ҡарамайынса, ҡыйынлыҡтарға бирешмәйенсә, киләсәккә өмөт менән йәшәй һәм эшләй районыбыҙ башҡорттары.



05-2001.p65 19 27.07.01, 11:32